# «Ерәнсә сәсән – hүҙ оҫтаhы, аҡыл эйәhе»

Проект авторҙары: Ейәнбирҙина Г. Ә.,

Аҡсурина Г.Ә.,

Янбаева Т.И.

**Ерәнсә сәсән яҡынса 13-14 быуаттарҙа йәшәгән. Унының исеме шағир-импровизатор һәм тапҡырлыҡ, үткер теллелек билдәһе булараҡ ҡушаматҡа әйләнгән. Ерәнсә сәсәнденң образы новеллаға тартым әкиәттәрҙә, мәсәлдәрҙә һаҡланып ҡалған.**

Мин әйтмәйем,күп әйтә, әү
Күп - сүп түгел,шул әйтә,
Әй, күп - сүп түгел,шул әйтә.
Күп эсендә кем сүп түгел, әү,
Күп һүҙен һәм шул әйтә.
Күп тигәнем халыҡ булыр, әү,
Тотҡан юлы хаҡ булыр,
Әй, һүҙе һөттән аҡ булыр,
Яҡшыға ышыҡтай тау булыр, әү,
Яуызға ҡаршы яу булыр.

Ерәнсә сәсән

## Актуаллеге:

**Халҡыбыҙҙың рухи байлығы булып торған шәхестәребеҙҙең исемен һаҡлау – беҙҙең бурысыбыҙ.**

## Проекттың маҡсаты:

- Ейәнсура районындағы тарихи ҡомартҡыларға, шәхестәргә ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыу;
- Ейәнсура районында туризмды үҫтереүгә булышлыҡ итеү.

# Проекттың бурыстары:

- **Ейәнсура районындағы тарихи ҡомартҡыларҙы һаҡлау;**
- **Ҡыҙыҡһыныусыларҙы районыбыҙҙың тарихи әһәмиәткә эйә булған географик урындары менән таныштырыу;**
- **Тарихи шәхестәр менән ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыу, уларға ҡарата ихтирам, ғорурлыҡ хистәре тәрбиәләү;**
- **Тыуған ер тарихына, тәбиғәткә һөйөү уятыу.**

**Ерәнсә сәсән башҡорт, ҡаҙаҡ, үзбәк, ҡарағалпаҡ, төркмән, һиндтарҙың әкиәт-көләмәстәре, фольклор әҫәрҙәре геройы. Уның тураһында башҡорттарҙа «Ерәнсә сәсән» ҡобайыры һаҡланған. Айҙар Хөсәйенов «Бәндәбикә менән Ерәнсә сәсән» пьесаһын яҙған. Михаил Воловиктың башҡорт халыҡ ижады мотивтарына нигеҙләнеп яҙылған китабында Ерәнсә сәсәндең күркәм образы тыуҙырыла**

Михаил Воловик

Ерәнсә сәсән

Хикәйәт

Башҡортостан китап нәшриәте

Өфө, 1983



# Ерәнсә сәсәнденң улы менән әңгәмәһе

- Атаң барҙа, һин бойоҡма,

- тигән сәсән,

малайына дәрт өҫтәргә теләп эстән.

- Ирмен тигән ир була алмаҫ

– ебеп төшкән,

ярты юлда тороп ҡалһа, сығып эштән.



# Ике сәсән әйтеше

...Сәсәнлектән ни мәғәнә - мәхрүм булғас хаҡ һүҙҙән, хан кәйефен һаҡлайым тип, тайпылғас һин пак һүҙҙән, әү, тайпылғас һин пак һүҙҙән.




Урыҫай
Ерансә
сәсән кәберлеге
Назый
Кәкре-ҡайын
Урман
Ишбай
Бурлы-
ҡыпҡай
Исекәй
Яуым
7км
Ҡысып
сыҡкан
Ерекле
Суҡтал
Сусаҡтау
Мәсекәй ш.
Ҡайын ҡулка
Үргән
ҮРГӘН





Ерәнсә сәсән ҡәбере Үрген ауылына яҡын Наҙый тауы битендә урынлашҡан. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында район хакимиәте инициативаһы менән ҡәбер тәртипкә килтерелде. Тирә-яҡ ауылдарҙан мәктәп уҡыусылары экскурсияға йөрөй.







# Ерәнсә сәсән ҡәберлеге хәҙерге ваҡытта


Назый тауы  битләүе



Наҙый йылғаһы

# Тәҡдимдәр:

- Әлеге ваҡытта сәсәндең ҡәберенә иғтибарҙы көсәйтеү, төҙөкләндереү;
- Ерәнсә сәсән исеменә арнап сәсәндәр бәйгеһе үткәреү;
- Боронғо башҡорт милли уйындарын тергеҙеп, ат сабышы һәм уҡ атыу буйынса ярыштар үткәреү;
- Ауылыбыҙҙың күренекле шәхестәре тарихын ныҡлы өйрәнеп, ауылыбыҙҙа туристик маршрут булдырыу;
- Районыбыҙҙың күренекле шәхестәре тураһында баннерҙар эшләп ҡуйыу;
- Йәш быуынға милли асылыбыҙҙы тапшырып мәктәптәрҙә музейҙарҙың эшен йәнләндереү

# Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт!